*Зилә ҒӘЛЛӘМОВА*

# “Бәхет эҙләп...”

## Йәшә, кеше!

Бәхет эҙләп тыуғанбыҙ,
Абынғылай минең ише.
Сак йылыткан нурҙы күреп,
Өмөт өҙмәй, тора кеше...

Йәшәй кеше, көн-төн ялғап
Хыялдарын бер-беренә.
Шатлык күреп балкыһа ул,
Һағышында бер һүрелә.

Бәхет эҙләп йәшәгәнгә
Ошо йырым оран булһын.
Ҡайғыларҙан бөгөлгәнгә
Һағыш еңер корал булһын.

Йәшә, кеше! Был тормошта
Һикәлтәле булһа юлдар.
Һәр көнөңә көсөң бирһәң,
Ҡәҙерлерәк кеүек йылдар.

## Яҙғы ҡояш

Яҙғы ҡояш йөрәгемде һыйпай,
Боҙо ирей каткан күңелдең.
Бер өмөтлө умырзая кеүек
Яҙғы нағыштарға күмелдем.

Ышаныстар — тамған тамсылар,
Улар яһар тиҙҙән йылғасыҡ.
Сыйырсыҡтар илһам биреп миңә,
Һайрай төҫлө, «Әйҙә, юлға сыҡ!»

Яҙмыш мине хәтфә яландарға,
Төрлө һуҡмаҡтарға саҡыра.
Туктап ҡалам, юлым бутамаҫҡа,
Көтәм әле, көтәм сак ҡына.

Яҙғы ҡояш ымһындыра күпкә,
Ышанысым бары изгегә.
Теләктәрем бөгөн тып-тып тама,
Йылға булып ағыр Иҙелгә.



*Зилә Марс кыҙы Ғәлләмова 1978 йылдың 21 июнендә Учалы районы Науруҙ ауылында донъяға килә. Бала сағы Сораман ауылында үтә. 1995 йылда Учалы урта мәктәбен тамамлай һәм Башкорт дәүләт педагогия институтының башкорт теле һәм мәҙәниәте тарихы бүлегенә укырға инә. 1999 йылда Силәбе калаһына күсеп, Силәбе дәүләт университетында филология һәм журналистика факультетында белем ала.*

*2001 йылда Өфөлә «Китап» нәшриәтендә сыккан «Нур усағы» йәштәр йыйынтығында Зиләнең «Күҙҙәреңә карап әйтке килә» тигән шиғырҙар шәлкеме донъя күрә. 2002 йылда Бәләбәй калаһы хакимиәте тарафынан уҙғарылған «Илһам шишмәләре» төбәк шиғриәт фестивалендә Гран-при яулай. Шул ук йылда Бәләбәйҙә нәшер ителгән «Йәйғор» китабында шиғырҙары баҫыла һәм «Силәбе шишмәләре» йыйынтығында шиғырҙар шәлкеме донъя күрә. Әлеге вакытта Зилә Учалы калаһы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлегендә эшләй.*

## Ҡулым һуҙам

Яҙмышҡынам ихлас рәфү һорай,
Кисерәмен барлыҡ үткәнемде.
Сөнки бөгөн шул яҙмышым илтте,
Илтте миңә күптән көткәнемде.

Моңһоу уйым ишек шаҡый төндә,
Ул яттыҡы, тигән була аҡыл.
Тик йөрәгем һиҙгер, өмөт һаҡлай,
Ғәмһеҙ һағыш үҙ юлынан аҡһын!

Яҙмыш илтте уны юлдарыма.
Йәшәйештең тәртиптәрен
бөгөн боҙам.
Яңғыҙлыҡты фашлап,
тыуған һөйөүемдән
Мин иҫереп, үҙем башлап
ҡулым һуҙам.



## Йәшлегемдең башы — баш ҡалам

Тағы илтер микән мине юлдар,
Өфөм, һиңә — ғәзиз баш ҡалам?..
Ни тиһәң дә талип тормошонан,
Уйлауымса, йәшлек башлана.

Мәктәп ҡыңғырауы һағыш илтте,
Арынырлыҡ һиндә моң таптым.
Өйрәттең һин, ауыр саҡта көл, тип,
Көлөр саҡтарымда илаттың.

Төрлө булды елдәр, ямғырҙарың,
Ҡай саҡ һуҡмаҡтарым бутаным.
Ярһып һыуһынымды ҡандырырға
Эсе һыуҙы яң(ы)лыш уртланым.

Һинең һүнмәҫ йондоҙҙарың күрҙе
Хаттар уҡып, илап алғанды.
Изге һөйөүемде һиндә таптым,
Ҡала иҫләп кенә алаһы.

Йырланыҡ беҙ ҡыҙҙар, егеттәр,
Һалып башҡорт көйөн гармунға...
Ағиҙелдә һыу сәсрәтеп уйнап,
Ҡайта инек ҡалып бик һунға.

Бөгөн төндә, ят уттарға ҡарап,
Сит ҡалала һине һағынам.
Илтһен ине һиңә ҙур һуҡмағым,
Яҙмышымдың башы — баш ҡалам!

*Силәбе, 2001 йыл.*

## Серең һөйлә әле, Ирәмәл!

Теләктәрҙең теләп изгеләрен
Сал башыңа мендем, Ирәмәл.
Сихри көскә эйә изге тауым,
Күңел һиңә килә, бир әмәл.

Ата-бабам төйәк иткән һине,
Шишмәләрҙең һыуы йән өрә.
Бейеклегең — һинең бөйөклөгөң,
Йәшәйешем биҙәй, йәм бирә.

Теләктәрҙең теләп изгеләрен,
Күккә осоп килә, бар әмәл!
Бейекһең һин! Әммә бойоҡһоң ник?!
Серең һөйлә әле, Ирәмәл!

## Ғәзиз ерем

Ғәзиз ерем, ҡайҙа юл алһам да
Фекерҙәштәр, дуҫтар табыла.
Хаталар бар, әммә йөрәк йәшәй,
Атлап барған ғына абына.

Ғәзиз ерем, ваҡытлыса һиндә
Бәхет өсөн тыуған ҡыҙ бала.
Кемдер мине көслө тиеп маҡтай,
Кемдер көслө, бары ҡыҙғана.

Тик, шулай ҙа, һиңә рәхмәтлемен!
Изге ерем, илап тыуһам да,
Илап йәшәгеләр килмәй бөгөн,
Тороп баҫам яң(ы)лыш ауһам да.